

# АРҒУЖА

*Башкорт телендә махсус бит №13 (103)*
*Декабрь, 2018 йыл*

ижад

## Теләгем

*Төнгө күкте биләп ай тирәләй,*
*Ем-ем итеп балкый йондоҙҙар.*
*Ергә тыуыр яңы йыл алдынан*
*Кешеләргә әйтер һүҙем бар:*
*“Ғашиктарға мәңге*
*ихлас һөйөү,*
*Сабыйҙарға аяҙ күк йөҙө;*
*Ҡара тирен түккән игенсенең*
*Уңыш менән килһен һәр көҙө!”*

**Ҡамса МОРТАЗИН.**

## Бер кайтаһы ине йәшлектәргә

*Бер кайтаһы ине йәшлектәргә,*
*Уй-хыялым — ярһыу арғымак,*
*Күңел, йөрәк бер ҙә тынғы*
*тапмай,*
*Киң доньялар хатта тар һымак.*
*Бер кайтаһы ине йәшлектәргә,*
*Ҡыҙыл буйы текә ярына,*
*Бала-сағым, ынйы тамсыларҙай,*
*Наҙлап йөрәгемә һарыла.*
*Бер кайтаһы ине йәшлектәргә,*
*Яландарым — зөмрәт йәшеллек.*
*Сәхрәләрҙә гиҙеп, әй,*
*йәшлегем,*
*Ҡайҙа ғына касып йәшендең?*
*Бер кайтаһы ине йәшлектәргә,*
*Наҙлап, һөйгән йәшлек таңына,*
*Тик алыҫта ак кайындар шәүлә,*
*Томандарҙа калған моң ғына...*

**Сафинә ХӘКИМОВА.**

## Йәштәргә теләктәрем

*Ак күбәләктәй,*
*ап-ак балаларым,*
*Татлы бал кеүек минең*
*балаларым,*
*Оҙон ғүмер, һаулык теләйем,*
*Тәүфик бир һин уларға,*
*хоҙайым.*
*Ҡотло булһын туйығыҙ,*
*Татыу үтһен йәшлек көнөгөҙ,*
*Ололарҙы кәҙер итегеҙ,*
*Туғандарға яғымлы булығыҙ.*

## Минең көндәрем

*Бөгөн дә көндө уҙғарҙым,*
*Иртәндә шулай үтер,*
*Һаулык булһа, көн дә үтә,*
*Һаулыкка ниҙәр етер?*
*Баксала һандуғастар*
*Теҙелгәндәр бағанға,*
*Сыр-сыр килеп һөйләшәләр,*
*Нәмәлер кәңәшләшәләр.*
*Белһәң ине кош телдәрен,*
*Ниндәй телдә һөйләшә,*
*Әллә инде минең менән*
*Берәр нәмә һораша?*
*Һөйләр инем мин дә һиңә,*
*Белмәйем шул теленде,*
*Ниңә генә хоҙай миңә*
*Һөйләп бирмәй серенде?*

**Гөлсөм ФӘХРИСЛАМОВА,**
**Дәрбиш ауылы.**



Конкурс

# Аҫыл өләсәйҙәр кайҙа?

***Акбаш ауыл мәҙәниәт йортонда “Беҙҙең аҫыл өләсәйҙәр” тигән бик матур конкурс булып уҙҙы.***

Буласак конкурс тураһында иғлан Акбаш ауыл советы сайтына һәм “Класташтар” йәмәғәт селтәренә куйылғайны. Бакһаң, беҙҙең якта ла өләсәйҙәр донъянан артта калмайҙар икән, улар Интернет аша конкурс тәртибе менән танышкандар. Бына шулай ауыл советы биләмәһенән ете конкурсант ярышка яҙылғайны.



Мәҙәниәт йорто директоры Эльвира Мөхәмәтшина менән уның художество етәксеһе Гүзәл Багаувова был йәһәттән тырышлык күрһәтте. Улар өләсәйҙәр өсөн кыҙыклы конкурстар һәм һынауҙар әҙерләгән. Өләсәйҙәр үҙҙәренең көйәрмәндәре менән килгәйне. Мәҫәлән, Болансы ауылынан килгән Таңһылыу инәй Дауытованың ейәндәре уға ярҙам йөҙөнән матур итеп йырланылар. Уҫман ауылынан килгән Рәйфә Ғәбиҙулла кыҙы Шәһисолтанованы ауылдаштары дәрләндереп ултырҙылар. Һынауҙарҙы уңышлы үткән Субары — Сыбар айғыр баткан ауылынан Фатима инәй Фәхретдинова Акбаш ауыл биләмәһенең иң аҫыл өләсәйе — еңеүсе булды.

Был осрашыу матур йырҙар бүләк итте. Дәртле уйындарға королған күңелле конкурс үтте лә китте. Ә бына мактаулы “Аҫыл өләсәй” тигән исемгә конкурста катнашкан өләсәйҙәрҙең һәр береһе лайык.

**Э. Фәйзуллина.**

Редакция почтаһынан

# Үткәндәрҙе иҫкә алып...

***1928 йылда Арғаяш районында колхоздар ойоштороло башлай. Шул осорҙа “Марксист” хужалығы, унан һуң Ҡолой, Дәүләтбай, Айбат ауылдарында колхоздар барлыкка килә. Был ауылдарҙа дүрт йыллык башланғыс мәктәп. Артабан Ҡолой урта мәктәбендә укыуҙы дауам итәбеҙ. Мәктәпкә көн һайын дүрт сакрым араны йәйәү йөрөп укыйбыҙ, кемдәргәлер ун сакрым үтергә тура килә. 1937 йылда ауыл хужалығы хеҙмәтен еңеләйткән техника күренгеләй башлай, ерҙе һөрөү һәм эшкәртеү ат менән башкарылды.***

1940 йылда Ҡолой МТС-на 14 йәшлек үҫмерҙәрҙе тракторсылар курсына ебәрәләр ине. Унда өс айлык укыу ойошторола. Мин шулар араһында инем. 15 йәштә колхозда тракторист булып эшләй башланык.

Һуғыш башланып китте. Ирҙәрҙе фронтка оҙаттылар. Колхоз эше үҫмерҙәр, катын-кыҙҙар һәм карт-королар өлөшөнә төштө. Ул замандар бик ауыр ине.

17 йәштә мине хәрби хеҙмәткә алдылар. Мин шулай йәш көйө ут эсенә барып индем. Ленинград фронтына эләктем. 1944 йылда бик каты яраландым. Санитарҙар, ут коршауы эсенән коткарып, ат арбаһына тейәп, госпиталь рәүешендәге бер һарайға алып барып бушаткандары бөгөнгөләй хәтеремдә. Унан һуң Ленинград госпитале, ике ай дауаланыу, төҙәгәс, яңынан яу кыры.

Ленинград блокадаһы. Беҙ калала камауҙа калған балалар, үҫмерҙәр һәм карттарҙы карайбыҙ. Складтан аҙык-түлек ташыйбыҙ, ауырыуҙарға һәм яралыларға ярҙам итәбеҙ. Ҡалала иҫән калғандарҙы дошман кулынан һаклайбыҙ...

1945 йылда һуғыш тамамланды. Финляндия сигендә мин пограничник инем. Атыу тауыштары тынғас кына тыуған якка әйләнеп кайттым.

1956 йылдан алып колой ауылында, 1978 йылдан беҙ Айбат ауылында йәшәйбеҙ. Мин үҙем 1926 йылғы, ә катыным — 1933-сө. Миңә — 93, ә уға 86 йәш. 1989 йылда Харис Сиражитдинов менән мслам дине нигеҙҙәрен өйрәнеү буйынса Өфөлә булдык. Мин уға сикһеҙ рәхмәтле. Әле Ҡолой ауылы мәсетенә йөрөйөм, изге Ҡөрьән кәримде ғәрәпсә укыйым.

**Хәбрахман АБДУЛЛИН, Айбат ауылы.**

Беҙҙең күршеләрҙә

# “Сәләм көндәре”

***Сосновка районының Һаккол ауыл мәҙәниәт йортонда “Шиғриәт байрамы” булып уҙҙы.***

“Сәләм көндәре” тигән матур ижад байрамы быйыл Сосновка районында унынсы тапкыр ойошторолдо. Унда Силәбе калаһы, Арғаяш һәм Ҡоншак районлары вәкилдәре катнашты. Фойела Ғәлимов Сәләм ижадына һәм уның исемендәге премияға бағышланған күргәҙмә куйылғайны.

Байрам кисәһен район хакимиәте башлығы Евгений Ваганов асып ижадсыларға берҙәмлек теләне. Залда башкорт һәм урыҫ телендә шиғырҙар һәм йырҙар яңғыраны. “Сосновская нива” гәзите хеҙмәткәре Ирина Русакова сығыш яһап: “Ғәлимов Сәләмгә арналған музей районда булырға тейеш, уның тәрбиәүи әһәмиәте бик ҙур,” — тине.

Быйылғы Сәләм исемендәге премия номенанттары — Наталья Коробинцева (“Нәфис әҙәбиәт”), Ирина Русакова (“Журналистика”), Зәйтүнә Хәйруллина (“Тыуған якты өйрәнеү”) үҙҙәре һәм ижадтары менән таныштырҙы. Хужалар яҙыусыларҙы яңы китап менән һөйөндөрҙө. “Живешь, деревенька...” тигән урыҫ һәм башкорт телендәге өр-яңы әҙәби йыйынтык байрамдың иң күркәм бүләге булды.

Әҙәби ижадты үҫтереүгә һәм халыктар дуҫлығын нығытыуға арналған байрамды ойоштороусыларға кунактар рәхмәт белдерҙе.

**Ҡамса МОРТАЗИН.**

Халык йолалары

# Яғаны нисек тегергә?

***Силәбе калаһында Башкортостан белгестәре тарафынан милли костюм тегеү буйынса лекция һәм оҫталык дәрестәре ойошторолдо.***

Башкортостандың атказанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, “Селтәр” студиһы етәксеһе Гөлгенә Баймурзина менән тарихсы, этнограф, башкорт милли кейемдәрен реконструкциялаусы Ильдар Гатауллин лекция һөйләгәндән һуң, милли кейемдәрҙе реконструкциялау оҫтаһы Александр Акулов менән бергә практик дәрес күрһәттеләр.

Практик дәрестең темаһы — Урал аръяғы башкорттарының баш кейемдәре, түшелдеректәр — яға, иҙеү, муйынса, хәситә (селтәр, ҙакал), өҫ кейеме — елән, камзул, алъяпкыс.